МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
Министерство образования и науки Республики Башкортостан
Муниципальный район Татышлинский район Республики Башкортостан
МБОУ СОШ с. Аксаитово

| | | |
|---|---|---|
| РАССМОТРЕНО<br>Методическим объединением классных<br>_______Лукманова А.З.<br>Протокол №2<br>от "30" 08. 2023 г. | СОГЛАСОВАНО<br>Заместитель директора по УВР<br>_______Саяпова Г.И.<br>Протокол №2<br>от "30" 08 2023 г. | УТВЕРЖДЕНО<br>Директор МБОУ СОШ с.Аксаитово<br>_______Лукманова А.З.<br>Приказ № 97<br>от "30" 08. 2023 г. |

Рабочая программа
учебного курса внеурочной деятельности
«Клуб литературного чтения»
4 класс

Разработана
учителем родного языка и литературы
высшей квалификационной категории
Нурисламовой И.Р.

с.Аксаитово
2023г.

## Аңлатма яҙыу

“Әҙәби уҡыу клубы”ның кластан тыш эшмәкәрлеге уҡыу- уҡытыу программаһы “Мәғариф тураһында”ғы законға, “Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын Федераль дәүләт хөкүмәт стандарттарына, “Башҡортостан халыҡтары телдәре” законына, 2023/2024 уҡыу йылында дөйөм белем биреү учреждениеларында ҡулланыу өсөн Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән уҡыу әсбаптары исемлегенә таянып эшләнде. Был документтарҙа милли мәктәптәрҙә туған телде тейешле кимәлдә уҡытыу, уның мөһим проблемалары, заманса уҡытыуҙың бурыстары, йүнәлештәре, юлдары билдәләнгән. Икенсе быуын хөкүмәт стандарттарының талаптарына ярашлы бала башҡорт теле буйынса белем алыу менән бер рәттән яңы йәшәү шарттарына яраҡлы тормош тәжрибәһе тупларға,уңышлы уҡыусы һәм эшмәкәр шәхес сифаттарына эйә булырға тейеш.

Кластан тыш эшмәкәрлектә яңы технологиялар ( үҫтереүсе уҡытыу, проблемалы, проектлау) һәм уйындар ҡулланыла.

«Әҙәби уҡыу клубы» кластан тыш эшмәкәрлегендә әҙәби уҡыу предметы ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тормошҡа ашырыла:

- Предмет кимәлендә белемгә эйә булыу;
- Уҡыу техникаһын үҫтереү, текстарҙы анализлау юлдарына эйә булыу;
- Яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә булыу;
- Тел тураһында белем алыу һәм системалаштырыу;
- Орфография һәм пунктуацияны өйрәнеү;
- Башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу.

Маҡсат һәм бурыстар:

Бала үҙ телендә һөйләшә, фекер йөрөтә, уның аша кешеләр араһындағы мөнәсәбәттең иң ҡатмарлы донъяһына үтеп инә, тәбиғәт, йәмғиәт һәм сәйәси күренештәрҙе танып белә, улар хаҡында тәүге төшөнсәләрҙе үҙләштерә. Туған тел балаға туранан-тура йоғонто яһай: туған телдә әйтелгән һүҙ уны шатландыра, көйөндөрә һәм төрлө бәхәстәргә тарта ала. Туған телде өйрәтеү уҡыусының үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләтен, һөйләү һәм яҙма телмәрен үҫтереүҙе, байытыуҙы, камиллаштырыуҙы, баланың үҙен шәхес итеп үҫтереүҙе, формалаштырыуҙы күҙаллай.

Эш программаһы:“Әҙәби уҡыу”кластан тыш эшмәкәрлеге 4-се кластарҙа аҙнаға – 1сәғәт,йылына -17 сәғәт.

Уҡыу ҡулланмаһы:Нафиҡова З.Ғ., Мортазина Ф.Ф. Башҡорт теле: уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 4-се класы өсөн туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн дәреслек, 2020 й.

## Программаның йөкмәткеһе.

**Башҡортостан – минең республикам(4с.)**

Республикабыҙ ни өсөн Башҡортостан тип атала/ “Республика” һүҙенең мәғәнәһе нимә? Республиканың тыуған көнө тураһында яуапты дөрөҫ әйтеп өйрәтеү. Ни өсөн “Урал” йырын башҡорт халҡының боронғо гимны тип йөрөтәбеҙ? Йыр һүҙҙәрен аңлатырға башҡорт халҡы тупланып йәшәһә генә халыҡ булып ойоша ала. Шуны аңлатырға. Республика көнөнә ҡарата нәшер ителгән баҫмалар, ваҡытлы матбуғаттағы мәҡәләләр менән таныштыра барырға.

**Республиканың башкалаһы – Өфө (3с.)**

Өфө ҡалаһының боронғо исеме менән таныштырыу. Өфө ҡалаһының ҡасан барлыҡҡа килеүе хаҡында ваҡытлы матбуғатта баҫыла барған мәҡәләләр менән уҡыусы аңларлыҡ кимәлдә таныштыра барыу. Өфөнөң иҫтәлекле урындары. Өфөлә йәшәүсе

халыҡтар. Өфө ҡалаһында ниҙәр етештерелә? Коллекция тупларға яратыусыларҙы Өфө ҡалаһында етештерелгән әйберҙәрҙең этикеткаларын йыя барыу менән ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Открыткалар файҙаланып, Өфөнө беләһеңме **?** тигән уйын ойошторорға мөмкин.

**Республика байрамдары (7с.)**

Республикала рәсми үткәрелгән байрамдар менән таныштырыу. Шәжәрә байрамы хәҙер рәсми байрамдар исемлегенә инде. Рәсми булмаған байрамдар хаҡында мәғлүмәттәр бирергә кәрәк.

**Минең тыуған йортом (2с.)**

Башҡортостандың ете мөғжизәһе менән танышыу.Халыҡ шағирҙарының тормош юлы менәр тәрәнерәк танышыу.Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен аңлатыу .Презентациялар төҙөү. Үҙеңдең ниндәй ырыуҙан икәнлеген, ырыу тамғаларын аңлатыу.

**Мин – үҙ илемдең тулы хоҡуҡлы граждани (2.)**

Илебеҙҙең йәшәүсе һәр кешенең һәр милләттең, тиң хоҡуҡлы ғына булыуы түгел, ә тиң рәүештә бурыслы һәм ил өсөн яуаплы ла икәнлеген аңлатыу.

## Уҡыу йылы аҙағына уҡыусыларҙың әҙерлек кимәленә талаптар

**Шәхси үҫеш кимәле.** «Әҙәби уҡыу клубы» кластан тыш эшмәкәрлеген үткәргәндә , уҡыусыны шәхси үҫеш кимәлен үҫтереү бурыстарын ҡуя:

- телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;
- тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларыңды белдереү;
- кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
- уҡылған әҫәрҙең геройҙарына һәм уларҙың эшенә ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү.

**Метапредмет кимәле** Ойоштороу эшмәкәрлеге:

- уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
- дәрестә эш барышын һөйләп барыу;
- дәреслек материалы менән эшләү барышында уйҙы, фаразды әйтеү;
- уҡытыусы тәкдим иткән план буйынса эшләү;
- коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү.

**Танып белеү эшмәкәрлеге**:

- дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
- бергәләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
- уҡылған тексттың йөкмәткеһен һөйләү.

**Аралашыу эшмәкәрлеге:**

- фекереңде телдән формалаштырыу;
- кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау;
- тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;
- тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
- уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү тураһында килешеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле:**

- тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
- бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
- хикәйә төҙөү;

**Универсаль- уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыуҙы индергән планлаштырылған һөҙөмтәләр.**

- 1. **Шәхси сифаттарҙы үҫтереү:**
- -үҙ аллы эш итергә , белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарарға;
- -атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә , уҡыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә ҡарата ихтирамлы булырға;
- - мәктәп йыһаздарына, уҡыу-әсбаптарына һаҡсыл булырға;
- - Тыуған илде яратырға, ерҙе, телде һаҡларға;
- - һаулыҡты нығытырға;
- - ҡунаҡта, кинола йәки экскурсияла һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булырға, файҙалы ял итергә;
- - кеше менән аралышыу этикетын үҙләштерергә.
- *3.* **Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштеү:**
- -сюжетлы һүрәт , һораузар, терәк һүҙҙәр ярҙамында хикәйә, әкиәт ижад итергә
- - үҙ аллы белем алырға , мәғлүмәт йыйырға һәм уларҙы ҡуллана белергә;
- -дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләргә: дәрескә маҡсат ҡуйырға һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырырға, эште дөрөҫ планлаштырырға, эҙләнеү эше алып барырға;
- -эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә;
- -тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерергә;
- -эшләгән эштәрен дөрөҫ баһаларға һәм кәрәк икән төҙәтмәләр индерергә.
- **<u>Көйләүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:</u>**
- - Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт*;*
- - төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү;- толерантлыҡ;
- - башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;
- - матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш үҙенең һәм әйләнә-тирәндәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;
- - мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсеэтик тойғолар – намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып ғәфү үтенеү.
- **<u>Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:</u>**
- - телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү;
- - төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица)*;*
- -мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү)*;*
- -һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү*;*
- -анализлай һәм синтезлай белеү*;*
- -сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү*;*
- -фекерләй белеү*;*
- **<u>Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:</u>**
- - һөйләү һәм яҙма формала яуап бирә белеү*;*
- -телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- - телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;

- -үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- -башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү;
- -дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;
- -һорауҙар бирә белеү.

**4-се класс аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр**

4-се класты тамамлаған уҡыусы донъяла төрлө телдә һөйләшеүсе, төрлө холоҡ-фиғелле, традициялы бик күп милләттәр барлығын белергә тейеш.

- Тәбиғәт өсөн уларҙың барыһының да тиң булыуы, береһенең дә өҫтөн дә, түбән дә, артыҡ та, кәм дә түгеллеген төшөндөрөргә.
- Тәбиғәт алдында ғына түгел Рәсәй Федерацияһы, Башҡортостан Республикаһы закондары алдында ла тиң хоҡуҡлы булыуыбыҙҙы аңлатырға кәрәк.
- Һәр милләт үҙен үҙе һаҡламаһа, бер кем дә һаҡлай алмай, закон ҡурсалай һәм мөмкинлек кенә бирә ала.
- Ер йөҙөндә йәшәү-йәшәмәү һәр милләт вәкиленең үҙ ҡулында, икәнлекте уҡыусы зиһене ҡабул итерлек кимәлдә аңлатырға кәрәк

Тематик план

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| Башҡортостан – минең республикам (4с.) | | |
| 1 | Ни өсөн республикабыҙ “Башҡортостан” тип атала? | 1 |
| 2 | Нимә ул “республика”? | 1 |
| 3 | 11 октябрь – Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө. | 1 |
| 4 | “Урал” йыры – башҡорт халыҡ гимны. | 1 |
| Республиканың баш ҡалаһы – Өфө (3с.) | | |
| 5 | Ҡала тарихынан ҡыҙыҡлы ваҡиғалар. Бөгөнгө Өфө. | 1 |
| 6 | Башҡортостан Республикаһының Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы. | 1 |
| 7 | Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры. | 1 |
| Республика байрамдары (1с.) | | |
| 8 | Башҡортостан Республикаһының рәсми байрамдары. | 1 |
| Минең тыуған йортом (7 с.) | | |
| 9 | Башҡортостандың ете мөғжизәһе | 1 |
| 10 | М.Кәрим “Ҡыш бабай бәләкәй саҡта” | 1 |
| 11 | С.Әлибаев “Тылсымлы шар” | 1 |
| 12 | “Урал батыр” әкиәте | 1 |
| 13 | Һин ниндәй ырыуҙан? | |
| Башҡорт халыҡ уйындары (2 с.) | | |
| 14 | Башҡорт халыҡ уйындары | 1 |
| 15 | “Аҡ тирәк, күк тирәк” уйыны | 1 |
| Сәнғәт оҫталарыбыҙ – донъя сәхнәләрендә (2 с.) | | |

| | | |
|---|---|---|
| 16 | Әҙәби бәйләнештәребеҙ. | 1 |
| 17 | Мин – үҙ илемдең тулы хоҡуҡлы гражданы. | 1 |
| Бөтәһе: | | 17 |

Календарьтематик планлаштырыу.

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | План буйынса | Фактически |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Ни өсөн республикабыҙ “Башҡортостан” тип атала? | 1 | | |
| 2 | Нимә ул “республика”? | 1 | | |
| 3 | 11 октябрь – Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө. | 1 | | |
| 4 | “Урал” йыры – башҡорт халыҡ гимны. | 1 | | |
| Республиканың баш ҡалаһы – Өфө. (3сәғәт) | | | | |
| 5 | Ҡала тарихынан ҡыҙыҡлы ваҡиғалар. Бөгөнгө Өфө. | 1 | | |
| 6 | Башҡортостан Республикаһының Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы. | 1 | | |
| 7 | Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры. | 1 | | |
| Республика байрамдары. (1сәғәт) | | | | |
| 8 | Башҡортостан Республикаһының рәсми байрамдары. | 1 | | |
| Минең тыуған йортом (7 с) | | | | |
| 9 | Башҡортостандың ете мөғжизәһе | 1 | | |
| 10 | М.Кәрим “Кыш бабай бәләкәй саҡта” | 1 | | |
| 11 | С.Әлибаев “Тылсымлы шар” | 1 | | |
| 12 | “Урал батыр” әкиәте | 1 | | |
| 13 | Һин ниндәй ырыуҙан? | | | |
| Башҡорт халыҡ уйындары (2 с) | | | | |
| 14 | Башҡорт халыҡ уйындары | 1 | | |
| 15 | “Аҡ тирәк, күк тирәк” уйыны | 1 | | |
| Сәнғәт оҫталарыбыҙ – донъя сәхнәләрендә. (2 сәғәт) | | | | |
| 16 | Әҙәби бәйләнештәребеҙ. | 1 | | |
| 17 | Мин – үҙ илемдең тулы хоҡуҡлы гражданы. | 1 | | |
| | Бөтәһе: | 17 | | |